*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Киң офоҡло ижад

Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ күркәм, ҡыҙыҡлы, һәр һулышы уйланылған тамаша ҡарарға ярата. Тамаша тамамланғас та — спектаклме ул, концертмы йәки башҡа төрлө сарамы — онотолорға тейеш түгел, кеше унан ҡәнәғәтләнеү алырға, ҡыуанырға, йыуанырға, геройҙар менән бергә уйланырға, кисерергә тейеш. Ул ғына ла түгел, әлеге тамаша тамамланып, бөтөр-бөтмәҫтән икенсеһен көтөп ҡала икән, автор, режиссер үҙ маҡсатына өлгәшкән тигән һүҙ.

Тамашаның уңышлы булыуы иң элек сценарий (спектакль) авторына бәйле булһа, уның яҙмышы режиссер ҡулында. Талантлы режиссер авторҙың идеяһын халыҡҡа еткереү менән бергә өр-яңы алымдар, табыштар ярҙамында уға йән өрөргә, ут итеп ҡабыҙырға, ошо уттың ялҡынын тамаша ҡылыусылар күңеленә еткерергә тейештер...

Нисек кенә булмаһын, беҙҙә әле талантлы режиссерҙар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Әле һеҙҙе шуларҙың береһе менән таныштырмаҡсымын.

Һүҙҙе 2004 йылдың йәйендә милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыу айҡанлы юғары кимәлдә үткәрелгән Салауат йыйынынан башлап киткем килә. Сөнки ул халҡыбыҙҙың үҙенең милли батырын ололауын, үҙ тарихына битараф булмауын, киләсәккә оло өмөттәр менән йәшәүен күрһәткән иҫ киткес мөһабәт сара булып иҫтә ҡалды. Ошо тамашаны меңдәр күңелендә мәңгелеккә уйылып ҡалырлыҡ итеп әҙерләгән кешеләрҙең береһе режиссер Әлмира Ҡыуатова ине. Синыфташы, фекерҙәше Сәрүәр Сурина менән бергәләшеп милли батырыбыҙ рухын өр-яңынан халҡына ҡайтара алды улар. Әгәр барса халыҡ ошо Салауат йыйынын: ”Бик шәп! Иҫ киткес!” — тип хуплаған икән, тимәк, уны атҡарыусылар үҙ маҡсатына өлгәшкән.

Әлмира Шәриф ҡыҙы Ҡыуатова



— Салауат йыйынын үткәреү проектының инициаторҙары — хөкүмәтебеҙ һәм Мәҙәниәт министрлығы булды, — ти Әлмира Шәриф ҡыҙы. — Миңә ошо сараның режиссеры булыу бурысын йөкмәткәс, ҡаушабыраҡ ҡалғандай булдым. Сөнки тәүҙән үк: был ғәҙәти сара, йәғни һабантуй кеүек булырға тейеш түгел, уны киң масштаблы, тәрән мәғәнәле, юғары рухлы башҡорт халыҡ йыйыны булараҡ тормошҡа ашырыу кәрәк, тип билдәләнде.

Былдай етди, яуаплы, абруйлы бурысты тормошҡа ашырасаҡ режиссерға эште башлап ебәреү өсөн материалдар, фекерҙәштәр кәрәк. Ошо мәлдә мин 1-се мәктәп-интернатында бергә уҡыған әхирәтем Сәрүәр Суринаны иҫкә төшөрҙөм.


*Әсәһе, кыҙы, улы менән (1988 йыл)*

Уға Салауат йыйыны тураһында тәкдим оҡшап ҡалды, оҙаҡҡа һуҙмайынса эшкә лә тотондоҡ. Уның йыйынды үткәреү тураһында фекерҙәре бик мәғәнәле, отошло, уңышлы булды.

Әлбиттә, сценарийҙы ижад иткәндә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ул саҡтағы рәйесе Әхмәт ағай Сөләймәнов, ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов, сәсәниә Розалия Солтангәрәева һәм башҡалар ихлас кәңәштәре менән ярҙам итте.

Әммә, нисек кенә булмаһын, Салауат йыйынының ошондай юғары кимәлдә, һәр кемдең иманы яңырырлыҡ, рухын күтәрерлек итеп үткәрелеүе иң элек режиссерға бәйле ине. Әлмира Ҡыуатова иһә ошо бурысты тулыһынса атҡарыуға өлгәште.

Йыйындың сценарийын тормошҡа ашырғанда Әлмира Шәриф ҡыҙы авторҙар алдына шундай талаптар ҡуя: беренсенән, байрам халыҡсан, ихлас, икенсенән, заманса, өсөнсөнән, төплө, объектив булырға, дүртенсенән, халҡыбыҙҙың милли батырыбыҙға булған ихтирамын һәм һөйөүен быуаса булмағанса күрһәтеүгә өлгәшеү. Бәхеткә ҡаршы, бөтә был талаптар үтәлә, һәм батырҙың тыуған яғында — Салауат районында үткәрелгән Салауат йыйыны халҡыбыҙ хәтерендә оҙаҡҡа уйылып ҡалды. Артабан иһә Башҡортостан Президенты М.Рәхимов йыл һайын 20 июлдә районларҙа ошондай йыйындар үткәреү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.

— Был йыйында өс меңдән ашыу кеше — артистар һәм күмәк күренештәрҙә ҡатнашыусылар сығыш яһаны, — тип хәтерләй Әлмира Шәриф ҡыҙы. — Әлбиттә, ошо халыҡты бер бөтөн итеп тотоу өсөн физик яҡтан да, мораль йәһәттән дә көслө булыу талап ителде. Репетициялар төнгө сәғәт өскә тиклем дауам итә, ә иртән иртүк яңынан башлана торғайны. Йыйынға Салауат районынан биш йөҙҙән ашыу һыбайлы йыйылды. Мин унда тәү тапҡыр аттар менән эшләнем. Ябай колхозсылар, Салауат батыр яугиры йәки Михельсон һалдаты булып, һуғыш күренештәрендә ҡатнашты. 400-ләгән ҡурайсының, 250 бейеүсенең йөрәге бер булып типһен өсөн байтаҡ көс һалырға тура килде. Уның ҡарауы, тамаша бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Ошо тулҡынланыу, ғорурлыҡ тойғоһо майҙандағы һәр кемде солғап алды. Ә шулай ҙа Салауат ролен уңышлы башҡарған актер һәм бейеүсе Урал Мортазиндың ”Мин — тере! Мин ҡайтырмын әле, башҡорт иле!” тигән һүҙҙәрен ишеткәс шатлығыбыҙҙың, ғорурлығыбыҙҙың сиге булманы, бөтә арып-талыуҙар онотолдо. Ошо мәлде һис онотторлоҡ түгел. Үҙемдең алға ҡуйған маҡсатты үтәй алыуыма, тарихты Салауат осорона кире бороп, уны бөгөнгө көнгә ҡайтара алыуыма ҡыуандым. Ошо мәлдә һәр башҡорт иҫ киткес ғорурлыҡ хисе кисергәндер, тип уйлайым.

Салауаттың тере рухын йыйынды тамаша ҡылған халыҡҡа ғына түгел, хатта тәбиғәттең асылына еткерә алыу өсөн күпме көс, илһам, дәрт кәрәктер, уныһын режиссер үҙе генә белә. Әммә ошо киң аҡланда

күрһәтелгән тарихи күренештәр мәлендә ер менән күк ауаздаш булғандыр, моғайын: берсә ҡояш йылмайыуы, берсә ямғыр һибәләп китеүе, ә тамашаның иң юғары нөктәһе — Салауат батыр халҡына ”Башҡорттарым, мин теремен, мин ҡайтырмын!” тип өндәшкән саҡта күк йөҙөндә йәшен ҡамсыһы ялтлап китеүе үҙе бер мөғжизә.

Эйе, хәҙер Салауат йыйыны йыл һайын үткәрелә. Әммә тәүгеһе, режиссер Әлмира Ҡыуатова ҡуйғаны, айырыуса ҡәҙерле һәм иҫтәлекле. Сөнки тап ошо йыйында батыр рухы бар булмышы менән ҡайтты. Уның ”Мин теремен, башҡорттарым!” тигән һүҙҙәре халыҡ хәтеренең мәңгелек булыуын, халыҡ йәшәгәндә батырҙар исеме лә йәшәүен тағы бер раҫланы. Тамашаның ҡуйыусы режиссеры Әлмира Ҡыуатованың был хеҙмәтенә йыйында ҡатнашыусылар һоҡланып бөтә алманы. Режиссерҙың киң ҡолас менән, ҡыйыу эшләүе, композициялар ҡоролошонда, айырыуса күмәк сәхнә күренештәрендә аныҡ эш итеүе хайран ҡалдырҙы. Башҡорт халҡының тормошондағы трагик хәлдәрҙе дөрөҫ һәм бар үткерлегендә биреүгә ҡоролған был уникаль театр тамашаһында авторҙар тарихи ваҡиғалар сылбырын аныҡ һәм сағыу итеп һынландырыуға өлгәште.

Әлмира Шәриф ҡыҙы менән осрашҡанда күптәр уның актриса һөнәренә ”хыянат” итеп, режиссер булып китеүенең сәбәбен һорамай ҡалмай.

— Мин һис кенә лә артистка булыуымды ҡалдырып, режиссураға тотоноп китермен, тип уйламаным, — ти Әлмира Шәриф ҡыҙы. — Театр сәхнәһенә ғүмерлеккә актриса булып килгәнмен төҫлө ине. Сибай филармонияһында иһә үҙемде ваҡытлыса ғына режиссер булып эшләймендер тип тоя инем. Йыл һайын Өфөгә отчет концерттары менән йөрөү, уларҙың сифатын күтәрергә ынтылыу, тәнҡит һүҙҙәрен иҫәпкә алып эшләү эшемдә ярҙам иткәндер, күрәһең. Иң элек көслө команда туплауға өлгәштек. Филармония директоры Рыинат Ишмуллин һәр ижади эҙләнеүҙәрҙе хуплап, ярҙам итергә әҙер торҙо — бейеү буйынса бейеү ансамбле етәксеһе Гөлназ Аҡназарова, Сулпан Аҫҡарова менән Айтуған Дәүләткирәевтар, фольклор буйынса Нәфисә Тулыбаева, оркестр

*Тамаша тамамланғас*



етәксеһе, аранжировкалар оҫтаһы Илшат Яхин, ҡурайсы һәм йырсы Сәғиҙулла Байегет менән эшләүе үҙе бер ҡыуаныс ине, ә йырсыларҙың исемен атау ҙа етә: Азамат Тимеров, Лилиә Ишемйәрова, Нәсимә Тимерова, Гөлсөм Бикбулатова, Фирүзә Париж, Альберт Салауатов кеүек моңло тауышлы, һәләтле, тәрбиәле йәштәр менән кинәнеп эшләнем мин.

Ысынлап та, әлеге ваҡытта беҙ Әлмира Шәриф ҡыҙын талантлы режиссер итеп күрергә күнеккәнбеҙ. Ә асылда ул актриса. 1979 йылда Өфө дәүләт сәнғәт институтының актерҙар бүлеген тамамлаған һәләтле ҡыҙҙы Салауат башҡорт драма театрына эшкә ебәрәләр. Ошо театрҙа ун йыл эшләү дәүерендә 20-нән ашыу ролде сәхнәгә алып сыға йәш актриса һәм уңыш яулай.

Яғымлы тауышлы, килешле зифа буйлы, ҡара күҙҙәре осҡонланып торған һөйкөмлө актриса сәхнәгә сығыу менән тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итә, үҙенә арбай. Ул башҡарған образдар күңел түрендә урын ала, оҙон-оҙаҡҡа иҫтә ҡала. Салауат театрында ижад иткән образдары араһында Назым Хикмәттең ”Онотолған әҙәм” спектаклендә — ҡыҙ, Фәрит Иҫәнғоловтың ”Арыш башағы”нда — Сәлимә, Фәнил Әсәновтың ”Тол ҡатын” драмаһында — ун биш йәшлек почтальон ҡыҙ Ғәлиә, Георгий Хугаевтың ”Күрше хаҡы — тәңре хаҡы” спектаклендә 70 йәшлек осетин ҡарсығы Марго һәм башҡаларҙы атап китергә мөмкин.

Актрисаның айырыуса яратып башҡарған ролдәренең береһе — Мостай Кәримдең ”Йәйәүле Мәхмүт” әҫәре буйынса ҡуйылған спектаклдәге Зәмзәгөл образы.

— Был ролде мин үҙемә атап яҙылған кеүек ҡабул иттем, — ти Әлмира Шәриф ҡыҙы, хәтирәләрен байҡап. — Уның өҫтөндә эшләгәндә образды бар тәрәнлегендә асыу ниәте менән халыҡ шағирының үҙе менән дә кәңәш ҡорҙом.

Зәмзәгөл дә Әлмира кеүек актриса булырға хыяллана. Бала саҡтан күңел түренә ҡунған ошо хыял сәнғәт иленә әйҙәгән дә инде Әлмираны.

Ул Ейәнсура районының Юлдаш ауылы ҡыҙы. Ошо гүзәл төбәктә тиҫтерҙәре менән шаулап-гөрләп үтә бала сағы. Алтынсы синыфты тамамлағас, Өфөгә, 1-се һанлы мәктәп-интернатҡа уҡырға килә. Мәктәптә уҡыған йылдарын, уҡытыусыларын һәр саҡ хөрмәтләп иҫкә ала Әлмира Шәриф ҡыҙы. Тәүге уҡытыусыһы Гөлшат Хәсәнова, мәктәп-интернатта Рәүеф Ғәзиз улы Кәримов, башҡорт теле уҡытыусыһы Фәрзәнә Фәйез ҡыҙы Абдуллина тормош асылын аңларға, донъя серҙәренә төшөнөргә ярҙам иткән. Ә сәнғәт институтында Фәрдүнә Ҡасим ҡыҙы Ҡасимова хаҡында тик һоҡланып, ғорурланып телгә ала. ”Беҙгә сәхнә серҙәрен асты, күңелебеҙҙә сәнғәткә һөйөү ҡабыҙҙы, — тип хәтерләй ул студент йылдарын һәм остазын иҫкә төшөрөп. Танылған сәхнә эшмәкәре К.С.Станиславский: ”Сәнғәттә осраҡлылыҡ юҡ, ныҡышмалы хеҙмәт емештәре генә бар”, — тигән. Әлмира Ҡыуатова ошо бөйөк фекерҙе һәр саҡ иҫендә тота, шуға таянып эшләй. Сәхнә сәнғәтендә үҙ урынын, үҙ һуҡмағын тапҡан актриса һәр сезон һайын береһенән-береһе сағыу, тамашасыларҙың хәтерендә оҙаҡ һаҡланырлыҡ образдар ижад итә. Ул саҡта бөтә булмышын театрға арнаған һәләтле актриса ниндәй роль бирһәләр ҙә оҫта итеп башҡара. Ҡыҫҡаһы, Салауат театрында Әлмира Ҡыуатова тигән талантлы актриса итеп таныта ул үҙен.

Театрҙа әүҙем эшләү менән бергә актриса нәфис фильмдарҙа ла уйнарға өлгөрә. Яҙыусы Янынбай Хамматов әҫәре буйынса ҡуйылған

”Бөртөкләп йыйыла алтын”, ”Мадам Баттерфляй” телефильмдарында уңышлы сығыш яһай.

...1980 йылда ғаилә мәшәҡәттәре менән улар Сибай ҡалаһына күсеп килә. Бында инде Әлмира Шәриф ҡыҙы үҙен актриса ғына түгел, режиссер ҙа итеп таныта.

Дөрөҫөрәге, Әлмира Шәриф ҡыҙы режиссер булараҡ Сибай балалар театрында танылла. Үҙе нигеҙ һалған ”Сулпан” балалар театрында ул Айһылыу Йәғәфәрованың ”Тирмәкәй”, Рәсимә Ураҡсинаның ”Бүре башы ун ике”, ”Йомро-йомро йомғағым”, Зөһрә Фәйзуллинаның ”Мөғжизәләр иле Урал” әҫәрҙәрен сәхнәләштерә. Һәр саҡ яңылыҡҡа ынтылыусан, өлгәшелгән уңыштар менән генә ҡәнәғәтләнергә ратмаған Әлмира Ҡыуатова артабан Сибай ҡалаһында филармония асыу хаҡында хыяллана башлай. Күп тә үтмәй тормошҡа аша был хыял: 1994 йылда Сибай филармонияһы үҙ ишектәрен аса. Әлмира Шәриф ҡыҙы иһә 2001 йылға тиклем унда театрҙың художество етәксеһе булып эшләй. Ошо ваҡыт арауығында 30-ға яҡын концерт программаһы әҙерләй ул. Уның ”Йырҙарың күп һинең, моңдарың күп, әйҙә йырла, башҡорт балаһы”, ”Арҡайым”, ”Ҡара һыуҙар”, ”Әсәйемдең бишек йырҙары” һәм башҡа программаларына сағыулыҡ, ғәжәйеп фантазия, заман һулышын тойоп эшләү һәм юғары профессионаллек хас. Шуны ла әйтергә кәрәк: күпселек тамашаларҙың сценарийын да үҙе яҙа ул.

Ошо осорҙа уның етәкселегендә Сибай филармонияһы үҙенең сағыу программалары менән Рәсәй һәм Халыҡ-ара кимәлдәге фольклор фестивалдәрендә (Санкт-Петербург, Екатеринбург, Пермь, Ҡазан, Курган һ.б. ҡалаларҙа) ҡатнаша, Үзбәкстанда, Ҡаҙағстанда, 1996 йылда — Францияла, 2001 йылда Грецияла гастролдәрҙә була.

Тап ошо йылдарҙа үҙенең таланттары менән дан тотҡан Сибай ерендә, Сибай күгендә Әлмира Шәриф ҡыҙының ихлас булышлығы менән хәҙер инде Башҡортостан йондоҙҙары булып танылған йырсылар һәм бейеүселәр — Азамат Тимеров һәм Нәсимә Тимерова, Лилиә Ишемйәрова, Гөлназ Аҡназарова, Сулпан Асҡаровалар, халыҡ-ара һәм республика бәйгеләре лауреаттары Гөлсөм Бикбулатова, Сәғиҙулла Байегет, Гөлдәр Ишҡыуатоваларҙың исемдәре балҡып ҡабына.

Ошо төбәктә һәр йыл гөрләп үткән халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың ”Ирәндек моңдары” бәйгеләрен дә 1996 йылдан 2001 йылға тиклем Әлмира Шәриф ҡыҙы әҙерләй һәм ойоштора. Режиссер оҫталығын артабан камиллаштырыу маҡсатында Әлмира Ҡыуатова Мәскәүҙә Мәҙәниәт министрлығы эргәһендәге квалификация күтәреү курстарын тамамлай. Шуға күрә уның артабанғы тамашалары тағы ла юғарыраҡ кимәлдә булыуы шикһеҙ. Әйтәйек, Әлмира Шәриф ҡыҙы Башҡорт дәүләт филармонияһы сәхнәһендә ҡуйған тамашалар уйланылған, ҡыҙыҡлы, фәһемле булыуы менән йәлеп итә. Тамашасылар уның етәкселегендә Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Тәнзилә Үҙәнбаева өсөн ҡуйылған ”Тәңрем минең — сәхнәм”, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Әнисә Яхинаның ижадына арналған ”Ашыҡма, ҡояш”, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәдис Ғәниев хаҡында ”Мөхәббәт өсмөйөшө” һәм башҡа программаларҙы ихлас ҡабул итте.

Республика халыҡ ижады үҙәгендә художество етәксеһе булып эшләү дәүерендә Әлмира Шәриф ҡыҙы тағы бик күп республика кимәлендәге тамашаларҙы сәхнәгә ҡуйҙы. Улар араһында Йылайыр районында уҙған

Ишмулла Дилмөхәмәтов көндәрен, Октябрьский ҡалаһында йыл һайын уңышлы уҙғарылып килгән ”Ҡурай байрамы”н, Баймаҡ ҡалаһындағы ”Урал батыр” бәйгеләрен күрһәтергә мөмкин.

Әлмира Шәриф ҡыҙы талантлы актриса, һәләтле режиссер булыу менән бергә бәхетле әсә лә. Ҡыҙы Алтынай ҙа сәнғәт юлын һайлаған. Тимәк, ижады менән һоҡланырлыҡ, балаларының күңелендә ошо ауыр ҙа, әммә һоҡланғыс сәнғәткә һөйөү уята алған ул. Ҡыҙы менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала Әлмира Шәриф ҡыҙы. 2003 йылда сәсәндәрҙең I Республика бәйгеһендә — Гран-при, 2004 йылда ”Һылыуҡай—2004” конкурсында еңеүсе — талантлы актриса Алтынай Ибраһимова Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Рәсәй кимәлендә танылыу яулай бара. 2007 йылда Рәсәй телевидениеһы аша күрһәтелгән ”Ҡәһәрләнгән ож-мах” фильмында (режиссеры Игорь Коробейников) Алтынай уңышлы сығыш яһаны. Ғөмүмән, Башҡортостанда ғына түгел, башҡа киностудия режиссерҙары ла уны йыш саҡыра, тимәк, һәләте барлығына ышана улар. Бәләкәйҙән музыка менән, балет студияһында шөғөлләнеүе лә ярҙам итә. Өс айлыҡ сағында уҡ сәхнәгә сыҡҡан ҡыҙ сәхнә йондоҙо булмай мөмкин түгел: үҙен белгәндән бирле сәхнәлә Алтынай. Әсәһе һәм атаһы, танылған режиссер Байрас Ибраһимовтар ҡабыҙған сәхнә уты әйҙәй уны.

Әлмира Шәриф ҡыҙының улы Айтуған йырлы күңелле, дәртле егет булһа ла, ябай төҙөүсе һөнәрен һайлаған. Әле юридик факультетта ситтән тороп уҡый. Ата-әсәһенең, һылыуы Алтынайҙың ижад емеш-тәренә ихлас ҡыуанып йәшәй.

Ижад — даими эҙләнеүҙәр, юғалтыуҙар һәм табыштар юлы. Әлми-ра Шәриф ҡыҙы һәр саҡ эҙләнеү юлында. Ул өлгәшелгәндәр менән ҡәнәғәтләнә торған кеше түгел. Тауҙан тауға үрләгән мосафир төҫлө үрҙәр яуларға күнеккән ижади шәхес өлгәшкән бейеклектән түбәнгә түгел, үргә ҡарай. Ә унда, хыял ҡанатына ҡунып, өр-яңы уңыштар балҡып саҡыра.

